0+

# Яңылыҡтар һәр йортҡа

Ишмырҙа ауылының иң мөһим һәм ҡыҙыҡлы ваҡиғалары хаҡында

№ 3, Июль 2019 йыл

ВЕСТИ В КАЖДЫЙ ДОМ

«Яңылыҡтар һәр йортҡа» проекты

2-се бит



## “Иғтибар – балалар!” акцияһы



***Ишмырҙа ауылы мәктәбе уҡыусылар королтайы ағзалары ЮХХДИ инспектор-ҙары менән берлектә, Магнитогорск-Ира юл трассаһында тимер атта йөрөргә яратыусыларға иҫкәрмәләр тараттылар***

Тәртип һаҡсылары әйтеүенсә, уның төп маҡсаты - өлкәндәр һәм балалар хәтерендә юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен нығытыу. Балалар ҡатнашлығындағы аварияларҙа йыш ҡына өлкәндәр ғәйепле. Уларҙың вайымһыҙлығы арҡаһында (ҡайыш элэктермәү сәбәпле ) ҡыҙғаныска ҡаршы бәлиғ булмағандарҙың ғүмерҙәре өҙөлә. ЮХХДИ инспекторҙары шулай уҡ “Ҡояшҡай” йәйләүендә тәрбиәләнеүселәр менән осрашып әңгәмә үткәрҙеләр. Юл йөрөү ҡағиҙәләре хаҡында бәйән иттеләр.

Мәктәп коллективы һәм уҡыусылар королтайы ағзалары Баймаҡ районының ЮХХДИ инспекторҙарына оло рәхмәтен еткерә. Эштәрендә уңыштар, ғаилә бәхете, ҡоростай һаулыҡ һәм именлек теләйбеҙ. Юлдағылар имен булһын!

## Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы

Яңы уҡыу йылына бер ай ваҡыт ҡалды.Мәктп һуңғы әҙерлек эштәрен теүәлләй. Йыһаз һәм кабинеттар яңыртылды, ремонт эштәре үткәрелде.

Мәктәбебеҙҙә «Зәңгәр яғыулыҡ»-газ үткәреү буйынса ремонт эштәр тамамланыуға бара.

24-се июль ауылыбыҙҙа бик матур сара үтте. 5-се округ (депутаты Рәйфә Бикәстән ҡыҙы) Таш ҡоҙоҡто таҙалап, ир-егеттәр тимер рәшәткә ҡуйҙылар. Оло инәйҙәр ҙә сыҡтылар, ә Рәхимова Зәкиә инәй матур итеп аят бағышланы, теләктәр теләне. Ҡатын-ҡыҙҙар самауыр сәйен эсереп ҡыуандырҙылар.

25-се июль ферма эргәһендәге аллеяға ултыртылған үҫентеләргә һыу ҡойолдо. Өмәлә ҡатнашҡан мәктәп уҡыусыларынв һәм һыу менән тәьмин иткән Радик Ғәйнислам улына ҙур рәхмәт.

## Эй, каникул, каникул, беҙ яратҡан мәл бит ул!

*Йәй - иң матур миҙгелдәрҙең береһе. Уҡыуҙан арынып, һәр беребеҙ йәйге каникулды түҙемһеҙләнеп көтөп ала. Йылы көндәрҙә туйғансы һыу инеп, ҡыҙынып, сәйәхәт итеп ҡалырға тырышабыҙ, олатай-өләсәйҙәргә ҡунаҡҡа барабыҙ, еләк-емешен дә йыябыҙ, баҡсала ла ярҙамлашабыҙ, бесән дә эшләшәбеҙ. Беҙҙең дә йәйге каникул күңелле генә башланып китте. Ял итергә ситтән урын эҙләп тороу һис тә кәрәкмәй, үҙебеҙҙең яҡтың да тәбиғәте матур, ял итергә урындар бар. Ишмырҙа ауылынан алыҫ түгел урынлашҡан Сәйғәфәр ауылына велосипедтарға атланып 6,7,8,9 класс уҡыусылары менән Һаҡмар йылғаһы буйына барҙыҡ. Беҙҙең походты география уҡытыусыһы - Сәлихов Рәмил Йәнозаҡ улы етәкләне. Барғанда, әлбиттә арытты, сөнки ундай оҙон юлға беренсе тапҡыр сығыуым ине. Ләкин, тиҙерәк ауылға барып етеп Һаҡмар йылғаһында һыу инеү теләге тимер атымды нығырaҡ елдерҙе. Барып еткәс, үҙебеҙгә уңайлы урын табып табын йәйеп, бирелгән тәмле урман сәйен эстек. Урманда шул тиклем күңелле. Тәбиғәте иҫ киткес матур, төрлө-төрлө сәскәләр хуш еҫтәрен сәсеп ултыралар, ҡоштар һайрашалар. Бергәләп һыу индек һәм фотоға төштөк. Ә Рәмил Йәнозаҡ улының беҙгә ҡыҙҙырған шешлеге телеңде йотҡорлоҡ ине. Көн дә эҫе ине, һыу инеп, ҡыҙынып, шаярышып – көлөшөп кис еткәнен һиҙмәй ҙә ҡалғанбыҙ. Көн ауышҡас тыуған ауылыбыҙға ҡарай ҡайтырға сыҡтыҡ. Был поход бөтәбеҙгә лә оҡшаны. Беҙгә шундай матур ял ойоштороған Рәмил Йәнозаҡ улына оло рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ. Дуҫтар, йәйге каникулдарығыҙҙы күңелле, файҙалы, иҫтәлекле үткәрегеҙ, хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен дә онотмағыҙ.*

*Айгиз Ишмырҙин, уҡыусылар королтайы етәксеһе*

# “Ҡояш ... у лагеры



Ирт
китапханаһына
Салауат Юлаев
һөйләне, Салау
Салауат тураһы
Кө
лагерында “Алло, таланттар эҙләйбеҙ” исемле музыкаль сара үтте. Был сара таланттар эҙләү менән бер рәттән быйылғы һауыҡтырыу лагерының йомғаҡлау сараһы ла булып торҙо. Сығыштар араһында ниндәй генә музыкаль номерҙар булманы: шиғыр – әкиәт һөйләнеләр, күңелле йырҙар, дәртле бейеүҙәр, “Урал батыр”эпосын яттан һөйләүселәр һ.б. Һәр сығыш яһаусы бүләк алып ҡыуанды.

Мәктәп директоры Иҙел Мөхтәр улының йәйләүҙе ябыу тантанаһында ҡатнашып, Мырҙабаев Данил һәм Гөлмәрйәмгә “Аманат” журналының ярты йыллыҡҡа яҙылыу квитанцияһын тапшырыуы сараға ҙур мәртәбә өҫтәне. Рәхмәт, Иҙел Мөхтәр улы. Изгелегегеҙ онотолмаҫ, иҫән – һау булығыҙ.

Бөгөнгә көн бөтәһе лә оҡшаны, ял итеүселәрҙең өйҙәренә ҡайтырға ашыҡмауы әйҙәүселәрҙең күңелен күтәрҙе. Афарин!

Һау бул, “Ҡояшҡай” көндөҙгө һауыҡтырыу лагеры!

**Хәбәрсе Әфләтунова Нурзилә**





# «Яңылыктар һәр йортка” проекты

## Ҡәҙерле дуҫтар!

*Беҙҙең мәктәптә « Яңылыктар һәр йортка » тип аталған мәктәп гәзите сыға башланы.Был гәзит һеҙҙең өсөн һәм һеҙҙең тураһында. Гәзит өҫтөндә эшләгән укыусыларҙың ошо көнгә тиклем был өлкәлә тәжрибәләре юк ине. Ләкин шуныһы кыуаныслы: балалар дәртләнеп, ең һыҙғанып эшкә тотондолар һәм улар гәзитте бөтә яктан кыҙыклы, мәғлүмәтле, файҙалы итеп эшләргә тырышалар. Ошо арала «Берҙәм Рәсәй» партияһы проекты сиктәрендә «Яңылыктар һәр йортка” проекты старт алды. Уның максаты- ауылыбыҙҙың яңылыктарын һәр бер өйгә еткереү булып тора. Гәзитте киләсәктә айына ике тапкыр сығарыу каралған. Проектың спонсоры булып «Берҙәм Рәсәй» партияһы фиркәһе булып тора. Гәзиттең сығыуы ауылыбыҙҙың барлык кешеләрен тағы ла ныгырак берләштереп, изге традицияһына әйләнер, тигән ышанста калам.*

*Барығыҙға ла яңы асыштар, ижади уңыштар теләйем!*



**Мәктәп директоры Монасипов И.М.**

## Пресс-центр









Гәзитттең авторҙары

# Моразым каялары араһында...







**30 июнь Моразым тарлауығына ял итергә барзык.**

Бик күңелле сәйәхәт булды!!! Онтолмаслык тәьсораттар кисерзек! Тәбиғәтенә хайран калдык! Тирә-як йәп-йәшел, урманлык, күккә ашып торған каялар, китапта укып ишеткән Оло Эйек йылғаһы сылтырап ята...Эх...

Күгәрсен районы Моразым ауылы янында урынлащкан туристик базала ял итеүселәр өсөн бөтә мөмкинселектәр булдырылған. Без ике көн буйы рәхәтләнеп һыу индек, тәбиғәттең матур урындарында фото төштөк һәм әлбиттә, Моразым мәмерйәһенә барзык. Без 25 метр тәрәнлеккә төштөк, 900 метрзан күберәк юл үттек. Мәмерйәлә йәйен дә, кышын да бер үк температура икән!? Сәйәхәт бик нык окшаны! Ә кайтышлай Зәйнәб Биишеваның музейына һуғылдык һәм Ямашла һыуһаклағысында туктап, тағы һыу индек. Сәйәхәтте ойоштороусы, Гөлгенә Мирғәле кызына оло рәхмәтебеззе еткергебез килә.



Хәбәрсе Шәйәхмәтова
Ынйыгөл

0+
# Олотау хәбәрҙәре
Ишмырҙа мәктәбенең балалар һәм үҫмерҙәр гәзите

№ 8
Апрель, 2019 йыл

## «Йәшел Республика” акцияһы
7-се бит

# Ҡоролтай-2019



**10 апрель көнө Ишмырҙа ауылы мәктәбендә Ишмырҙа ауылы башҡорттарының ҡоролтай ултырышы үтте.**

Йыйындың эшендә Баймаҡ районы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе Ришат Вәкил улы Ишембәтов, Баймаҡ районы башҡорттары ҡоролтайы ағзаһы Атанова Рәйсә Самат ҡыҙы ҡатнашты. Йыйынға Ишмырҙа ауылында эшләүсе Уҡыусылар ҡоролтайы, Ир-егеттәр һәм “Ағинәйҙәр” ҡорҙары, “Аҡһылыуҙар” клубы, Атайҙар, ҡатын-ҡыҙҙар һәм ветерандар советтары ағзалары һәм башҡалар саҡырылды. Ҡоролтайҙың үткән осорҙағы эшенә йомғаҡ яһалды, милләтебеҙ алдында торған мөһим мәсьәләләр тикшерелде.

2-се бит

## «КФХ Рәсүлев” фермер хужалығына сәйәхәт
4-5-се биттәр

***“Һаҡмар”ға яҙыл һәм бүләк от!” акцияһы!!!***

***1 майға тиклем яҙылып өлгөргәндәр термопот, электр сәйнүге, һәр хужабикәнең хыялы булған бай аш-һыу приборҙары йыйылмаһы отасаҡ. “Г.З. Байрамғолова” КФХ-һы иһә ҡаҙ бәпкәләре менән ҡыуандырасаҡ. Еңеүселәр 30 апрелдә билдәләнәсәк. Артабан акцияның икенсе этабы старт ала – 1 майҙан 20 майға ҡәҙәр яҙылыусылар араһында елле призлар уйнатыла. “Һаҡмар”ға яҙылығыҙ, квитанцияларығыҙҙы редакцияға ебәрегеҙ, дуҫтар!***

***P.S. Әйткәндәй, 30 апрель “Һаҡмар”ҙар беҙҙең ауылға киләсәктәр. Мөмкинселекте ҡулдан ысҡындырмайыҡ!***

**«Яңылыҡтар һәр йортҡа” проекты**

ВЕСТИ В КАЖДЫЙ ДОМ

2-се бит

## Озон һуҙҙең ҡыҫҡаһы

30 апрель Уҡыусылар ҡоролтайының ойошторолоуына бер йыл тулыу айҡанлы ШӘЖӘРӘ байрамы үткәреләсәк.

Мәктәбебеҙҙә «Зәңгәр яғыулыҡ»- газ үткәреү буйынса ремонт эштәре башланды.

Мәҙәниәт йортонда мал тотоусыларҙың сход-йыйылыштары үтте

9-сы класс уҡыусылары дәүләт йомғаҡлау аттестацияһына әҙерләнеү маҡсатында ҡаланың 3-сө мәктәбендә үткән ресурс центрында әҙерлек курстарында булып ҡайттылар.

Мәктәптә күсәгилешлек айлығы барышында,мәктәпкәсә тәрбиәләнеүселәр- буласаҡ 1-се класс уҡыусылары, мәктәп буйлап сәйәхәт иттеләр, үҙҙәренең беренсе класс уҡытыусыһы менән таныштылар .

Сүп - сар урынына ағас ултыртыу акцияһы бара.

1 апрель көнө ауылыбыҙҙың мәҙәниәт йортонда көлкө көнөнә арналған концерт үтте.

7-се округ Ф.Бүләковтың әҫәре буйынса“Һөйәһеңме-һөймәйһеңме? " исемле трагикомедия ҡуйҙы.

Башҡа яңылыҡтарҙы мәктәптең https://ishmurzino.02edu.ru/school/ сайтында ҡарай алаһығыҙ.

**Шунда уҡ** Ишмырҙа ТВ

БАШКОРТОСТАН 1919–2019

# Ҡоролтай-2019

БАШКОРТОСТАН 100 1919–2019

Ишмырҙа ауылы ҡоролтайының 2018 йылдағы эше ҡәнәғәтләнерлек тип баһаланды Бер тауыштан түбәндәге ҡарар ҡабул ителде:

1) Туған телде үҫтереү һәм һаҡлау, милли баҫмаларға яҙылыуҙы ойошҡанлы үткәреү;

2) “Сәләмәт ауыл – 2019” проектында ҡатнашыу;

3) Иҫерткес эсемлектәрҙе һатыуға бәйле законға ярашлы, мәктәп эргәһендә иҫерткес эсемлектәрҙе һатыуҙы сикләргә. Аҙнаның һәр йома көнөн “айыҡ көн” тип иғлан итеү;

4) Башҡорт рухын тәрбиәләү маҡсатында ғаиләнең һәм йәмғәт ойошмаларының ролен күтәреү буйынса асыҡ бурыстар билдәләү

ҡоролтай эше барышында “Һаҡмар” гәзитенә яҙылыу ойошторолдо, бөтәһе 15 кеше яҙылды.

Был сараны Ишмырҙа мәктәбе уҡыусылар ҡоролтайы, Ағинәйҙәрҙең сығыштары биҙәне.

**Хәбәрсе Әфләтунова Нурзилә**







ВЕСТИ в каждый дом

## «Яңылыктар һәр йортка” проекты

**Ҡәҙерле дуҫтар!**

*Беҙҙең мәктәптә «Олотау хәбәрҙәре» тип аталған мәктәп гәзите сыға.Был гәзит һеҙҙең өсөн һәм һеҙҙең тураһында. Гәзит өҫтөндә эшләгән укыусыларҙың ошо көнгә тиклем был өлкәлә тәжрибәләре юҡ ине. Ләкин шунһы ҡыуаныслы: балалар дәртләнеп, ең һыҙғанып эшкә тотондолар һәм улар гәзитте бөтә яктан ҡыҙыклы, мәғлүмәтле, файҙалы итеп эшләргә тырышалар. Ошо арала «Берҙәм Рәсәй» партияһы проекты сиктәрендә «Яңылыктар һәр йортка” проекты старт алды. Уның маҡсаты- ауылыбыҙҙың яңылыктарын һәр бер өйгә еткереү булып тора. Гәзитте киләсәктә айына ике тапкыр сығарыу каралған. Проектың спонсоры булып «Берҙәм Рәсәй» партияһы фиркәһе булып тора. Гәзиттең сығыуы ауылыбыҙҙың барлык кешеләрен тағы ла нығырак берләштереп, изге традицияһына әйләнер, тигән ышанста калам.*

*Барығыҙға ла яңы асыштар, ижади уңыштар теләйем!*



**Мәктәп директоры Монасипов И.М.**

## Пресс-центр





**Гәзитттең авторҙары**

# «ЙОНДОҘҘАР ПАРАДЫ - 2019»








Баймаҡ ҡалаһында «ЙОНДОҘҘАР ПАРАДЫ - 2019» байрамы үтте.

Һәләтле балаларҙы ҡотлау 23-24 апрель халыҡ ижады үҙәгендә тантаналы рәүештә барҙы. Йыйынға республика еңеүселәре һәм призерҙары, бөтә Рәсәй һәм төбәк олимпиадаларында, фәнни-ғәмәли конференцияларҙа, конкурстарҙа, ғилми-тикшеренеү эштәре Бәләкәй фән академияһы уҡыусылары, төрлө спорт төрҙәре буйынса чемпиондар саҡырылды. Иң зирәк һәм аҡыллы уҡыусыларҙы ҡотлау байрамын мәғариф бүлеге етәксеһе Зәйнуллин И.Ә. асты һәм олимпиадаларҙа, конкурстарҙа призлы урындар алыусыларҙы ҡотлап үтте.

Ә инде Баймаҡ районы хакимиәте башлығы вазифаһын башҡарыусы Әминев Ф.Ғ. спорт өлкәһендә еңеүгә өлгәшкән балаларҙы ҡотланы һәм уҡыуҙарында уңыштар теләне. Бүләкләү тантанаһы балаларҙың концерт номерҙары менән һуғарылып барҙы, матур биҙәлгән зал барыһының да күңеленә хуш килгәндер.

Алда яңы асыштар көтә, ҙур ҡаҙаныштарға өлгәшкән уҡыусылар һәм улырҙың етәкселәренә ижади үрҙәр теләйбеҙ. Афарин!

**Хәбәрсе**

**Шәйәхмәтова Ынйыгөл**



# «КФХ Рәсүлев" фермер хужалығына сәйәхәт



21 апрель көнөндә беҙ 8-се класс уҡыусылары «КФХ Рәсүлев" фермер хужалығына экскурсияға барҙыҡ. Класс етәксеһе Үҙәкинә Гөлгинә Мирғале ҡыҙы менән ферма тормошон ҡарап үттек.

Тәүҙә беҙ һауынсыларҙың эш урынын ҡараныҡ, аҙаҡ уларҙан интервью алдыҡ. Фермала 140 һауын һыйырҙары бар. Беҙ яңы тыуған быҙауҙарҙы күрҙек, улар хаҡында Ишмырҙина Эльвира Әмир ҡыҙы һөйләп бирҙе. Ҡайһы бер һыйыр-быҙауҙар араһында ҡыҙыҡлы исемдәр осраны.

Әфләтунова Мәүлихә инәйҙең һыйырҙарының исемдәре ғәҙәти булмаған ине. Мәҫәлән: Билайн, Мтс, Антенна тигән ҡушаматлы һыйырҙар булды.







Фермала ғаилә менән эшләгән йәш хеҙмәткәрҙәр бар. Ирле-ҡатынлы Исламовтар ғаиләһе "КФХ Рәсүлев» фермаһында бик уңышлы эшләп йөрөйҙәр.

Махсус бит!..

Ишмырҙа ауылындағы крәҫтиән-фермер хужалығы башлығы Радик Ғәйнислам улы Рәсүлев етәкләгән КФХ-ның төп йүнәлеше-игенселек,үҫемселек, ит һәм һөт етештереү. Һыйырҙарҙың күбеһе симменталь тоҡомло, көнөнә ике тапҡыр һауыла





Лаборантка – Ишмырҙина Эльвира Әмир ҡыҙы һөттөң сифатын, ҡуйылығын тикшерә. Эльвира Әмир ҡыҙы яуаплы хеҙмәткәр. Яҡшы эшләгәне өсөн «Һөнәре буйынса иң яҡшыһы» исеменә лайыҡ булған



Беҙгә экскурсия бик ныҡ оҡшаны, үҙебеҙгә бик күп мәғлүмәттәр алдыҡ. “КФХ Рәсүлев” ферма хужалығында эшләгән хеҙмәткәрҙәргә ҙур рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ. Эштәрендә уңыштар, һаулыҡ, бәхет теләйбеҙ. Һәм киләсәктә йәш ҡыҙҙар, малайҙарға ошо эш менән булышырға тәкдим итәбеҙ.



Махсус битте «Йәш хәбәрселәр» түңәрәге етәксеһе Үҙәкинә Гөлгөнә Мирғәле ҡыҙы әҙерләште



# «Йәшел Республика" акцияһы иғлан ителде







*Республика Хөкүмәте бойороғо менән Башҡортостанда "Йәшел Башҡортостан" акцияһы иғлан ителде. Шул йәһәттән "Ағас ултырт –ғүмер бүләк ит!" девизы аҫтында үткәрелгән был акцияға Баймаҡ районы халҡы ла ихлас ҡушылдылар. Райондың ҡайһы бер ауылдары был акцияны дәррәү күтәреп алдылар. Был изге эштән бер ауыл да ситтә ятып ҡалмаҫ, тип уйлайбыҙ. Ишмырҙа ауылы халҡы ла (ирекмәндәр) "ЙӘШЕЛ БАШҠОРТОСТАН" акцияһында ҡатнашырға теләк белдерҙеләр. Ферма эргәһендә (Зәки Вәлиди урамына киткән юл ситендә) аллея булдырыу планлаштырыла. Территорияны һөрөп, кәртәләп алып, ҡарағай үҫентеләре ултыртыласаҡ.Республикабыҙҙы йәшелләндереүҙә, уны таҙа тотоуҙа бар көсөбөҙҙө йәлләмәйек!*



**Хәбәрсе Әфләтунова Нурзилә**

# Тимур командаһы

*Ишмырҙа ауылы мәктәбе укыусылары аҙна һайын тип әйтерлек өлкән инәй-олатайҙарға ярҙам итергә барабыҙ. 5-се класс укыусылары Зөбәйлә Сөләймән кыҙына, 8-се класс укыусылары Миңһылыу Ирғәле кыҙына барып ярҙам итәбеҙ. Ишек алдарын кый суп-сарҙан таҙартабыҙ. Егеттәр бакса, урам эсен тырматтылар, кыҙҙар һеперҙеләр, иҙән, һауыт-һаба йыуҙылар. Укыусылар хөрмәтле инәйҙәргә иҫәнлек-һаулык теләп, изге эштәр башкарғандары өсөн кыуанып кайттылар.*



# Төҙөкләндереү айлығы



**6 апрелдән 11 майға тиклем Башкортостанда төҙөкләндереү айлығы тип иғлан ителде. Ишмырҙа ауылы биләмәһенең барлык учреждениелары дәррәү рәүештә был эшкә тотондо һәм үҙҙәренә беркетелгән майҙансыктарҙы сүп-сарҙан таҙарталар.**







# "Яҙ һулышы"

5 апрель көнө мәҙәниәт йортонда "Яҙ һулышы" исемле уйын-көлкөгә короլған байрам концерты үтте. Концертта «Ир-егеттәр», «Ағинәйҙәр» корҙары, «Акһылыуҙар» ансамбле, Сәғит Кашкаров онотолмаҫлык тәҫораттар калдырҙылар. Аҙағында 80-90 йылдар дискотекаһы һәм төрлө кыҙыклы уйындар ойошторолдо. Барлык таланттарыбыҙға ҙур рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ! Һеҙгә иҫәнлек, һаулык, оҙон ғүмер, гел дә шулай актив булып калығыҙ. Афариндар!









**Мәғлүмәттәрҙе хәбәрсе Килсенбаева Гөлзифа әҙерләне**



# Экология аҙнаһы



*15 апрелдә мәктәп экология акцияһында катнашты. Ишмырҙа ауылы белем усағында «экология аҙнаһы» булдырылды. Акцияның маҡсаты булып укыусыларға экологик дәрестәр үткәреү, каты коммуналь калдыктарҙы айырым йыйыу булды. Белемде пропагандалау маҡсатында экология, экологик тәрбиә мәктәп балалары өсөн экологик марафон үткәрелде. Тематик класс сәғәттәре һәм “Тәбиғәт менән дуҫһыңмы?” тип аталған сара үткәрелде. Укыусылар һүрәттәр конкурсында бик әүҙем ҡатнаштылар. Тәбиғәтте һәм тереклекте һаклау һәр кемдең бурысы икәненә балалар төшөндө.*



*Хәбәрсе Ишмырҙин Айгиз*

# Таҙа Олотау

*25-се апрель көнө беҙҙең Ишмырҙа ауылында урынлашкан “Олотау “ тауына барып сүп-сарҙарҙан таҙарттык,бик күп ҡый йыйҙык. Беҙ 5-8-се синыф класс укыусылары менән берлектә “Олотау” тауын таҙартып, изге эш эшләп ҡайттык. Йәш быуындарға өндәр инек: Үҙебеҙҙең тыуған ауылыбыҙҙы тауын һәм тәбиғәтен бысратмаҫка,киләсәктә “Олотау” сәскә атыр тип өмөттә ҡалабыҙ.*

*Хәбәрсе Мырҙабаев Данил*



**Гәзит айына бер тапҡыр сығарыла.**

**Гәзит өсөн “Йәш хәбәрселәр” түңәрәге ағзалары яуаплы.**

**Мөхәррир – Шәйәхмәтова Ынйыгөл, 8 класс уҡыусыһы.**



0+

# Олотау хәбәрҙәре

Ишмырҙа мәктәбенең балалар һәм үҫмерҙәр гәзите

№ 8

Апрель, 2019 йыл

## «Йәшел Республика" акцияһы

7-се бит

# Ҡоролтай-2019




**10 апрель көнө Ишмырҙа ауылы мәктәбендә Ишмырҙа ауылы башҡорттарының ҡоролтай ултырышы үтте.**

Йыйындың эшендә Баймаҡ районы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе Ришат Вәкил улы Ишембәтов, Баймаҡ районы башҡорттары ҡоролтайы ағзаһы Атанова Рәйсә Самат ҡыҙы ҡатнашты. Йыйынға Ишмырҙа ауылында эшләүсе Уҡыусылар ҡоролтайы, Ир-егеттәр һәм "Ағинәйҙәр" ҡорҙары, "Аҡһылыуҙар" клубы, Атайҙар, ҡатын-ҡыҙҙар һәм ветерандар советтары ағзалары һәм башҡалар саҡырылды. Ҡоролтайҙың үткән осорҙағы эшенә йомғаҡ яһалды, милләтебеҙ алдында торған мөһим мәсьәләләр тикшерелде.

2-се бит

## «КФХ Рәсүлев" фермер хужалығына сәйәхәт

4-5-се биттәр

***"Һаҡмар"ға яҙыл һәм бүләк от!" акцияһы!!!***

***1 майға тиклем яҙылып өлгөргәндәр термопот, электр сәйнүге, һәр хужабикәнең хыялы булған бай аш-һыу приборҙары йыйылмаһы отасаҡ. "Г.З. Байрамғолова" КФХ-һы иһә ҡаҙ бәпкәләре менән ҡыуандырасаҡ. Еңеүселәр 30 апрелдә билдәләнәсәк. Артабан акцияның икенсе этабы старт ала – 1 майҙан 20 майға ҡәҙәр яҙылыусылар араһында елле призадар уйнатыла. "Һаҡмар"ға яҙылығыҙ, квитанцияларығыҙҙы редакцияға ебәрегеҙ, дуҫтар!***

***P.S. Әйткәндәй, 30 апрель "Һаҡмар"ҙар беҙҙең ауылға киләсәктәр. Мөмкинселекте ҡулдан ысҡындырмайыҡ!***

**«Яңылыҡтар һәр йортҡа" проекты**

**ВЕСТИ В каждый дом**

2-се бит

## Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы

30 апрель Уҡыусылар ҡоролтайының ойошторолоуына бер йыл тулыу айҡанлы ШӘЖӘРӘ байрамы уткәреләсәк.

Мәктәбебеҙҙә «Зәңгәр яғыулыҡ»- газ үткәреү буйынса ремонт эштәре башланды.

Мәҙәниәт йортонда мал тотоусыларҙың сход-йыйылыштары үтте

9-сы класс укыусылары дәүләт йомғаҡлау аттестацияһына әҙерләнеү маҡсатында ҡаланың 3-сө мәктәбендә үткән ресурс центрында әҙерлек курстарында булып ҡайттылар.

Мәктәптә күсәгилешлек айлығы барышында,мәктәпкәсә тәрбиәләнеүселәр- буласаҡ 1-се класс укыусылары, мәктәп буйлап сәйәхәт иттеләр, үҙҙәренең беренсе класс укытыусыһы менән таныштылар .

Сүп - сар урынына ағас ултыртыу акцияһы бара.

1 апрель көнө ауылыбыҙҙың мәҙәниәт йортонда көлкө көнөнә арналған концерт үтте.

7-се округ Ф.Бүләковтың әҫәре буйынса"Һөйәһеңме-һөймәйһеңме? " исемле трагикомедия ҡуйҙы.

Башҡа яңылыҡтарҙы мәктәптең https://ishmurzino.02edu.ru/school/ сайтында ҡарай алаһығыҙ.

**Шунда уҡ** Ишмырҙа ТВ

# Ҡоролтай-2019

Ишмырҙа ауылы ҡоролтайының 2018 йылдағы эше ҡәнәғәтләнерлек тип баһаланды Бер тауыштан түбәндәге ҡарар ҡабул ителде:

1) Туған телде үҫтереү һәм һаҡлау, милли баҫмаларға яҙылыуҙы ойошҡанлы үткәреү;

2) “Сәләмәт ауыл – 2019” проектында ҡатнашыу;

3) Иҫерткес эсемлектәрҙе һатыуға бәйле законға ярашлы, мәктәп эргәһендә иҫерткес эсемлектәрҙе һатыуҙы сикләргә. Аҙнаның һәр йома көнөн “айыҡ көн” тип иғлан итеү;

4) Башҡорт рухын тәрбиәләү маҡсатында ғаиләнең һәм йәмәғәт ойошмаларының ролен күтәреү буйынса асыҡ бурыстар билдәләү

ҡоролтай эше барышында “Һаҡмар” гәзитенә яҙылыу ойошторолдо, бөтәһе 15 кеше яҙылды.

Был сараны Ишмырҙа мәктәбе уҡыусылар ҡоролтайы, Ағинәйҙәрҙең сығыштары биҙәне.

**Хәбәрсе Әфләтунова Нурзилә**







## «Яңылыктар һәр йортка” проекты

**Ҡәҙерле дуҫтар!**

*Беҙҙең мәктәптә «Олотау хәбәрҙәре» тип аталған мәктәп гәзите сыға.Был гәзит һеҙҙең өсөн һәм һеҙҙең тураһында. Гәзит өҫтөндә эшләгән уҡыусыларҙың ошо көнгә тиклем был өлкәлә тәжрибәләре юҡ ине. Ләкин шуныһы ҡыуаныслы: балалар дәртләнеп, ең һыҙғанып эшкә тотондолар һәм улар гәзитте бөтә яҡтан ҡыҙыҡлы, мәғлүмәтле, файҙалы итеп эшләргә тырышалар. Ошо арала «Берҙәм Рәсәй» партияһы проекты сиктәрендә «Яңылыктар һәр йортка” проекты старт алды. Уның маҡсаты- ауылыбыҙҙың яңылыҡтарын һәр бер өйгә еткереү булып тора. Гәзитте киләсәктә айына ике тапкыр сығарыу ҡаралған. Проектың спонсоры булып «Берҙәм Рәсәй» партияһы фирҡәһе булып тора. Гәзиттең сығыуы ауылыбыҙҙың барлыҡ кешеләрен тағы ла нығыраҡ берләштереп, изге традицияһына әйләнер, тигән ышанста ҡалам.*

*Барығыҙға ла яңы асыштар, ижади уңыштар теләйем!*



**Мәктәп директоры Монасипов И.М.**

## Пресс-центр



**Гәзитттең авторҙары**

# «ЙОНДОҘҘАР ПАРАДЫ - 2019»








Баймаҡ ҡалаһында «ЙОНДОҘҘАР ПАРАДЫ - 2019» байрамы үтте.

Һәләтле балаларҙы ҡотлау 23-24 апрель халыҡ ижады үҙәгендә тантаналы рәүештә барҙы. Йыйынға республика еңеүселәре һәм призерҙары, бөтә Рәсәй һәм төбәк олимпиадаларында, фәнни-ғәмәли конференцияларҙа, конкурстарҙа, ғилми-тикшеренеү эштәре Бәләкәй фән академияһы уҡыусылары, төрлө спорт төрҙәре буйынса чемпиондар саҡырылды. Иң зирәк һәм аҡыллы уҡыусыларҙы ҡотлау байрамын мәғариф бүлеге етәксеһе Зәйнуллин И.Ә. асты һәм олимпиадаларҙа, конкурстарҙа призлы урындар алыусыларҙы ҡотлап үтте.

Ә инде Баймаҡ районы хакимиәте башлығы вазифаһын башҡарыусы Әминев Ф.Ғ. спорт өлкәһендә еңеүгә өлгәшкән балаларҙы ҡотланы һәм уҡыуҙарында уңыштар теләне. Бүләкләү тантанаһы балаларҙың концерт номерҙары менән һуғарылып барҙы, матур биҙәлгән зал барыһының да күңеленә хуш килгәндер.

Алда яңы асыштар көтә, ҙур ҡаҙаныштарға өлгәшкән уҡыусылар һәм улырҙың етәкселәренә ижади үрҙәр теләйбеҙ. Афарин!



**Хәбәрсе**

**Шәйәхмәтова Ынйыгөл**

# «КФХ Рәсүлев” фермер хужалығына сәйәхәт



21 апрель көнөндә беҙ 8-се класс уҡыусылары «КФХ Рәсүлев” фермер хужалығына экскурсияға барҙыҡ. Класс етәксеһе Үҙәкинә Гөлгинә Мирғәле ҡыҙы менән ферма тормошон ҡарап үттек.

Тәүҙә беҙ һауынсыларҙың эш урынын ҡараныҡ, аҙаҡ уларҙан интервью алдыҡ. Фермала 140 һауын һыйырҙары бар. Беҙ яңы тыуған быҙауҙарҙы күрҙек, улар хаҡында Ишмырҙина Эльвира Әмир ҡыҙы һөйләп бирҙе. Ҡайһы бер һыйыр-быҙауҙар араһында ҡыҙыҡлы исемдәр осраны.

Әфләтунова Мәүлихә инәйҙең һыйырҙарының исемдәре ғәҙәти булмаған ине. Мәҫәлән: Билайн, Мтс, Антенна тигән ҡушаматлы һыйырҙар булды.







Фермала ғаилә менән эшләгән йәш хеҙмәткәрҙәр бар. Ирле-ҡатынлы Исламовтар ғаиләһе “КФХ Рәсүлев» фермаһында бик уңышлы эшләп йөрөйҙәр.



Ишмырҙа ауылындағы крәҫтиән-фермер хужалығы башлығы Радик Ғәйнислам улы Рәсүлев етәкләгән КФХ-ның төп йүнәлеше-игенселек,үҫемселек, ит һәм һөт етештереү. Һыйырҙарҙың күбеһе симменталь тоҡомло, көнөнә ике тапҡыр һауыла



Лаборантка – Ишмырҙина Эльвира Әмир ҡыҙы һөттөң сифатын, ҡуйылығын тикшерә. Эльвира Әмир ҡыҙы яуаплы хеҙмәткәр. Яҡшы эшләгәне өсөн «Һөнәре буйынса иң яҡшыһы» исеменә лайыҡ булған





Беҙгә экскурсия бик нык оҡшаны, үҙебеҙгә бик күп мәғлүмәттәр алдыҡ. "КФХ Рәсүлев" ферма хужалығында эшләгән хеҙмәткәрҙәргә ҙур рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ. Эштәрендә уңыштар, һаулыҡ, бәхет теләйбеҙ. Һәм киләсәктә йәш ҡыҙҙар, малайҙарға ошо эш менән булышырға тәкдим итәбеҙ.

Махсус битте «Йәш хәбәрселәр» түңәрәге етәксеһе Үҙәкинә Гөлгөнә Мирғәле ҡыҙы әҙерләште



# «Йәшел Республика” акцияһы иғлан ителде



Республика Хөкүмәте бойороғо менән Башҡортостанда “Йәшел Башҡортостан” акцияһы иғлан ителде. Шул йәһәттән “Ағас ултырт –ғүмер бүләк ит!” девизы аҫтында үткәрелгән был акцияға Баймаҡ районы халҡы ла ихлас ҡушылдылар. Райондың ҡайһы бер ауылдары был акцияны дәррәү күтәреп алдылар. Был изге эштән бер ауыл да ситтә ятып ҡалмаҫ, тип уйлайбыҙ. Ишмырҙа ауылы халҡы ла (ирекмәндәр) “ЙӘШЕЛ БАШҠОРТОСТАН” акцияһында ҡатнашырға теләк белдерҙеләр. Ферма эргәһендә (Зәки Вәлиди урамына киткән юл ситендә) аллея булдырыу планлаштырыла. Территорияны һөрөп, кәртәләп алып, ҡарағай үҫентеләре ултыртыласаҡ.Республикабыҙҙы йәшелләндереүҙә, уны таҙа тотоуҙа бар көсөбөҙҙө йәлләмәйек!







**Хәбәрсе Әфләтунова Нурзилә**

# Тимур командаһы

*Ишмырҙа ауылы мәктәбе укыусылары аҙна һайын тип әйтерлек өлкән инәй-олатайҙарға ярҙам итергә барабыҙ. 5-се класс укыусылары Зөбәйлә Сөләймән кыҙына, 8-се класс укыусылары Миңһылыу Ирғәле кыҙына барып ярҙам итәбеҙ. Ишек алдарын кый суп-сарҙан таҙартабыҙ. Егеттәр бакса, урам эсен тырматтылар, кыҙҙар һеперҙеләр, иҙән, һауыт-һаба йыуҙылар. Укыусылар хөрмәтле инәйҙәргә исәнлек-һаулык теләп, изге эштәр башкарғандары өсөн кыуанып кайттылар.*





## Төҙөкләндереү айлығы

**6 апрелдән 11 майға тиклем Башкортостанда төҙөкләндереү айлығы тип иғлан ителде. Ишмырҙа ауылы биләмәһенең барлык учреждениелары дәррәү рәүештә был эшкә тотондо һәм үҙҙәренә беркетелгән майҙансыктарҙы сүп-сарҙан таҙарталар.**







## "Яҙ һулышы"

5 апрель көнө мәҙәниәт йортонда "Яҙ һулышы" исемле уйын-көлкөгә королған байрам концерты үтте. Концертта «Ир-егеттәр», «Ағинәйҙәр» корҙары, «Акһылыуҙар» ансамбле, Сәғит Кашкаров онотолмаçлык тәçораттар калдырҙылар. Аҙағында 80-90 йылдар дискотекаһы һәм төрлө кыҙыклы уйындар ойошторолдо. Барлык талантарыбыҙға ҙур рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ! Һеҙгә исәнлек, һаулык, оҙон ғүмер, гел дә шулай актив булып калығыҙ. Афариндар!









**Мәғлүмәттәрҙе хәбәрсе Килсенбаева Гөлзифа әҙерләне**



# Экология аҙнаһы



*15 апрелдә мәктәп экология акцияһында катнашты. Ишмырҙа ауылы белем усағында «экология аҙнаһы» булдырылды. Акцияның маҡсаты булып укыусыларға экологик дәрестәр үткәреү, каты коммуналь калдыктарҙы айырым йыйыу булды. Белемде пропагандалау маҡсатында экология, экологик тәрбиә мәктәп балалары өсөн экологик марафон үткәрелде. Тематик класс сәғәттәре һәм “Тәбиғәт менән дусһыңмы?” тип аталған сара үткәрелде. Укыусылар һүрәттәр конкурсында бик әүҙем ҡатнаштылар. Тәбиғәтте һәм тереклекте һаклау һәр кемдең бурысы икәненә балалар төшөндө.*



*Хәбәрсе Ишмырҙин Айгиз*

# Таҙа Олотау

*25-се апрель көнө беҙҙең Ишмырҙа ауылында урынлашкан “Олотау “ тауына барып сүп-сарҙарҙан таҙарттык,бик күп ҡый йыйҙык. Беҙ 5-8-се синыф класс укыусылары менән берлектә “Олотау” тауын таҙартып, изге эш эшләп кайттык. Йәш быуындарға өндәр инек: Үҙебеҙҙең тыуған ауылыбыҙҙы тауын һәм тәбиғәтен бысратмаҫка,киләсәктә “Олотау” сәскә атыр тип өмөттә ҡалабыҙ.*

*Хәбәрсе Мырҙабаев Данил*



**Гәзит айына бер тапҡыр сығарыла.**

**Гәзит өсөн “Йәш хәбәрселәр” түңәрәге ағзалары яуаплы.**

**Мөхәррир – Шәйәхмәтова Ынйыгөл, 8 класс уҡыусыһы.**

